БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ МӘҒАРИФ МИНИСТРЛЫҒЫ
ТУЙМАЗЫ ПЕДАГОГИЯ КОЛЛЕДЖЫ

# *II курста М.Кәрим ижадын өйрәнеү*
# *Уҡытыу-методик комплексы*

Рекомендовано
Министерством образования
Республики Башкортостан

Туймазы 2008

УДК 81
ББК 372
К 25

**Каримова Г.Я.,** II курста М.Кәрим ижадын өйрәнеү. *Укытыу-методик комплексы.- Өфө: БР ММ РУҒМУ, 2008. - 92 б., табл., схем., фото.*

**ISBN 978-5-94705-171-1**

Учебно-методическое пособие
рассмотрено на заседании НМС
Протокол №8 от 30.01.2007 г.

**Составитель: Каримова Г.Я.,** учитель башкирского языка и литературы
**Рецензенты: Юлдашбаев А.Р.**, заместитель председателя правления союза Писателей Башкортостана, лауреат премии им. Ш.Худайбердина, отличник образования Республики Башкортостан
**Давлетбирдин М.Т.**, преподаватель высшей категории гимназии №1 г. Туймазы

Данный методический комплекс может быть использован при подготовке к урокам. Он предназначен для студентов и учителей школ.

**ISBN 978-5-94705-171-1**

**Каримова Г.Я., 2008**

# Йөкмәткеһе

**Инеш**.......................................................................................4

1. **М.Кәрим йондоҙлоғонда.** Яҙыусының тормош һәм ижад биографияһы буйынса дәрес...........................................................6
2. **Шағир һәм һалдат М.Кәримдең яу юлдары буйлап.** Дәрес-экскурсия.......................................................................................12
3. **Шағир һөйөүе.** Дәрес- уйланыу..................................................21
4. **«Ҡара һыуҙар» поэмаһында батырлыҡ һәм ҡурҡаҡлыҡ проблемалары**. Дәрес-әңгәмә.........................................................28
5. **Шағир илендә**. М.Кәрим шиғриәте буйынса дәрес-смотр.............................................................................................32
6. **«Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесында шәхестең формалашыуы проблемаһы**.............................................................................37
7. **М.Кәримдең «Ай тотолған төндә» трагедияһында рухи азатлыҡ өсөн көрәш**...........................................................................44

9. **М.Кәрим тормошо һәм ижады буйынса тест һорауҙары**..........48

10. **М.Кәрим шиғриәтенә арналған шиғыр уҡыусылар бәйгеһе** сценарийы...........................................................................50

**Һығымта**..........................................................................................53

**Әҙәбиәт**............................................................................................5

# Инеш

Башkортостандың халыk шағиры М.Кәрим ижады – башkорт әҙәбиәтендә XX быуаттың 40-сы йылдарынан алып хәҙергәсә йылдам үҫешен иң көслө сағылдырған һәм милли художество kаҙаныштары кимәлен билдәләгән юғары һүҙ сәнғәте ул. Халыk шағиры поэзияһының, драматургияһының һәм проза әҫәрҙәренең күркәм өлгөләре әҙәбиәтебеҙҙең алтын фондын тәшкил итә. Уларҙа халыkтың меңәр йыл туплаған әҙәп-әхләk, эстетик, рухи тәжрибәләре ижади үҙләштерелеп, яңыса, заманса балkыш ала. Үҙенең бөйөк ижади еңеүҙәре, кешегә ышаныслы һөйөүе һәм мәрхәмәтлеге, гуманизмы һәм ғәҙеллек тантанаһы хаkына көрәше, Тыуған илебеҙ алдындағы мәшһүр хеҙмәттәре өсөн М.Кәрим бөтә халыk һөйөүен kаҙанды, иң юғары наградаларға һәм дәрәжәләргә лайыk булды. Шуға күрә лә яҙыусының шәхесе, ижады – ҙур тәрбиәүи сара өлгөһө ул М.Кәрим ижадын өйрәнеү барышында йәштәрҙә гүзәл әхлаkи сифаттар формалаштырыу өсөн ҙур мөмкинлектәр бар. Әҙиптең һәр әҫәрендә күтәрелгән проблема актуаллеген бер kасан да юғалтмаясаk, улар дөйөм кешелекте элек-электән борсоған мәсьәләләргә kағыла.

Беҙҙең колледжда Туған тел һәм әҙәбиәт бүлегенең II курсы өсөн башkорт әҙәбиәте курсы «V-XI синыфтар өсөн башkорт әҙәбиәте» программаһына нигеҙләнеп төҙөлдө. Шул программа буйынса М.Кәрим ижадын өйрәнеүгә бүленгән 7 сәғәтте беҙ түбәндәгесә ойошторҙоk:

Таблица 1

| Дәрес һаны | Дәрес темалары | Сәғәт һаны |
|---|---|---|
| 1. | М.Кәримдең тормош һәм ижад юлы | 1 |
| 2. | М.Кәримдең Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы ижады | 1 |
| 3. | | 2 |

| | | |
|---|---|---|
| <br>4.<br>5.<br>6. | М.Кәрим лирикаһы<br>«Ҡара һыуҙар» поэмаһы<br>«Ай тотолған төндә» трагедияһы<br>«Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» әҫәре | <br>1<br>1<br>1 |

Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә М.Кәрим ижадын өйрәнеүҙең маҡсаттары итеп түбәндәгеләрҙе билдәләнек:

- Башҡортостандың халыҡ шағиры М.Кәрим тормош һәм ижад юлын өйрәнеү, унын әҙәби процеста тотҡан урыны хаҡында белем биреү;

- яҙыусы шәхесенә хас юғары сифаттарҙы асыу, әҙиптең үҙенә һәм ижадына ҡарата хөрмәт тәрбиәләү;

- М.Кәрим әҫәрҙәре аша йәштәргә әҙәби белем һәм мәғлүмәт биреү; анализлау, баһалау күнекмәләрен үҫтереү;

- өйрәнелгән әҫәрҙәренең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү аша студенттарҙа әхләҡи сифаттар, Тыуған илгә, ергә, халыҡҡа ихтирам тәрбиәләү, киләсәк өсөн яуаплылыҡ тойорға өйрәтеү;

- студенттарҙың ижади фекерләү һәләтен, бәйләнешле телмәрен үҫтереү, үҙ фекер һәм ҡараштарын әйтергә, яҡларға өйрәтеү;

- үҙ аллы эшмәкәрлекте, фәнни хеҙмәттәр менән эшләү күнекмәләрен үҫтереү;

- әҙәбиәт һөйөүсе шәхестәр тәрбиәләү.

Ғилми һәм методик әҙәбиәттә М.Кәрим ижадына арналған мәҡәләләр, хеҙмәттәр байтаҡ. Һәр дәрес өсөн ҡулланырға тәҡдим ителгән әҙәбиәт исемлеге күрһәтелә. Шулай ҙа Ғ.Хөсәйеновтың «Мостай Кәрим. Шәхес. Шағир. Драматург. Прозаик» исемле монографияһы айырыуса иғтибарға лайыҡ.

Уҡытыу-методик комплексында синыфтан тыш сара сценарийы, яҙыусы ижады буйынса тест һорауҙары, электрон вариантта презентациялар, йырҙар, шиғырҙар бирелде.

Был хеҙмәт башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына М.Кәрим ижадын өйрәнеүҙә кәрәкле әсбәп булыр тип ышанабыҙ.

**Ҡушымтала түбәндәге презентацияларҙы тәкдим итәбеҙ.**







Мостай Кәрим
Бөйөк Ватан һуғышында


Мостай Кәрим – прозаик

# Мостай Кәрим поэзияһы

## МОСТАЙ КӘРИМ ҒАИЛӘҺЕ




Мостай Кәрим
наградалары